# Балаларҙың телмәрен үҫтереүҙә, ҡул моторикаһының йоғонтоһо

***Ата-әсәләр өсөн консультация***



Балаларҙың ҡул бармаҡтарының мускулдарын бәләкәй саҡтан алып үҫештерә башларға кәрәк, сөнки бала доньяға ауаз һалғас та, уның сенсор үҫеше башлана. Сабый әсәһенең сәңгелдәк йырҙарын тыңлап үҫә,шунан ҡушылып беренсе әүәләү телмәре асыла. Ҡул моторикаһы баланың мейеһен, иғтибарын, хәтерен, фекерләү ҡеүәһен үҫтереүгә булышлыҡ итеү менән бер рәттән, телмәр үҫешенә лә ҙур йоғонто яһай. Әлеге заманда, һатыуҙа бик күп уйындар бар, әммә балаға ул ғына етмәй, ул янында булған яҡындары менән аралашырға тейеш. 2 йәштән алып ата-әсә күҙәтеүе аҫтында, бала менән бергәләп пластилин әүәләү,эре 4-6 деталдән торған пазл йыйырға һ.б тәҡдим итергә була. Бала ҙурая биргәс 4-5 йәшендә шулай уҡ ата-әсә күҙәтеүе аҫтында,балалар өсөн ҡайсы менән төҫлө ҡыяғыҙҙар киҫергә, йәки ҡул менән өҙгөләп берәр әйбер йәбештерергә ярҙам итеп була. Шулай уҡ төрлө төймәләр, бауҙар бәләргә, мозаикалар, пазлдар йыйырға була.



Баланың ҡул моторикаһы насар үҫешһә,бындай балаларҙың аң кимәле шул рәүешле башҡаларҙан артта ҡала бара.



Мәктәпкә уҡырға төшкәнсе, баланың ҡул моторикаһы яҡшы үҫешергә тейеш, сөнки уның буласаҡ уҡыуына ныҡ йоғонто яһайасак.



Әҙерләне: Хисаметдинова Ләйсән Сәит ҡыҙы,
беренсе категория тәрбиәсеһе